# *“Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай…”*

## Шағир Р.Ғарипов ижадында ҡоштар образы

Туймазы педагоги колледжының IV курс студенты

МОРАТШИНА Ләлә Фәтих ҡыҙының сығышы

Етәксеһе: КӘРИМОВА Гөлнара Яхъя ҡыҙы

**2012 й**

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле конферениияла ҡатнашыусылар! Һеҙҙең иғтибарығыҙға "Рәми Ғарипов ижадында ҡоштар образы" тип аталған тикшеренеү эшебеҙҙе тәҡдим итәбеҙ. Эштең авторы - Моратшина Ләлә, ТПК студенты. Етәксем-башҡорт теле уҡытыусыһы Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы.

"Тәбиғәт — һәр бер бите беҙҙе күп нимәгә өйрәткән берҙән бер китап,"- тигән Гете. Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Ғариповтың шиғырҙарын уҡыған һайын, был фекерҙең дөрөҫ икәнлегенә инанаһың. Шағир тәбиғәт хаҡында күпме шиғыр яҙһа, беҙгә шунса хәҡиҡәт еткерә. Р.Бикбаев, Ф.Күзбәков, З.Ураҡсин кеүек билдәле әҙиптәр ул шиғырҙарҙы юғары баһаланылар. "Был шәхестең барлыҡ яҙмышы ер-һыу яҙмышы менән айырылғыһыҙ",-ти Р.Бикбаев, тәбиғәттең әҙип ижадындағы роле тураһында. Беҙ ҙә был төркөм шиғырҙарҙы үҙ иттек һәм, Гете һүҙҙәре менән әйтһәк, тәбиғәт тигән китапты асырға, уның ҡоштар хаҡындағы битен Р.Ғарипов шиғри юлдары аша өйрәнергә булдыҡ. Ижад ителеүенә 30-40 йыл самаһы ваҡыт үтһә лә, Р.Ғариповтың ҡоштарға бәйле һәм башҡа шиғырҙарын замандаштарыбыҙ яратып уҡый. Был әҙиптең оҫталығына, тормошто, уй-фекерҙәрен сағыу образдар аша йәнле итеп еткереүенә бәйле.

Алда әйтелгәндәрҙән сығып, беҙ шағирҙың был темаға ҡараған әҫәрҙәрен тикшереүҙе актуаль тип таптыҡ һәм Р.Ғариповтың шиғырҙарында ҡоштар образын өйрәнеү *бурысын* ҡуйҙыҡ. Фәнни-тикшеренеү эше буйынса түбәндәге *маҡсаттарҙы* билдәләнек:

1. Р. Ғариповтың был тематик төркөмгә ҡараған шиғырҙарын тикшереү, идея-эстетик үҙенсәлектәрен анализлау.

2. Шиғырҙарҙы аңларға булышлыҡ итерҙәй өҫтәлмә сығанаҡтарҙы хеҙмәттәрҙе йыйыу, тикшереү.

3. Ҡоштар хаҡында шиғырҙарҙың Р.Ғарипов ижадында һәм башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урынын билдәләү.

4. Йәштәрҙә тыуған яҡҡа, тәбиғәткә, Тыуған илгә һөйөү уятыуҙа, уларҙа матур сифаттар тәрбиәләүҙә был шиғырҙарҙың мөмкинлектәрен күрһәтеү.

Тикшеренеү эшебеҙҙең *предметы*: Рәми Ғарипов шиғырҙары.

*Объекты*: шағир ижадында ҡоштар образы сағылышы.

Р.Ғарипов ысын күңелдән тәбиғәтте һөйгән һәм уның серҙәрен үҙенсәлекле итеп асҡан. Ҡоштар образы сағылған шиғырҙары ғына уның 30-ҙан артыҡ. Был әҫәрҙәрҙә беҙ киң билдәле һандуғас, ҡарлуғас, һабантурғай, кәкүк, сыйырсыҡ кеүек ҡоштарға тап булабыҙ. Шиғырҙарҙы анализлау барышында беҙ авторҙың әйтергә теләгән фекерҙәре төрлөлөгөн, бигерәк тә "ер-һыу яҙмышының шәхес яҙмышы менән бер бөтөн икәнен" күрҙек.

Беренсенән, нескә күңелле шағир булараҡ, Р.Ғарипов ҡоштарға, уларҙың гүзәл йырлауына таң ҡала һәм күп кенә әҫәрҙәрендә ҡоштарҙы тәбиғәт күрке булараҡ һүрәтләй. Р.Ғарипов өсөн тәбиғәт - ул үҙе оло сәнғәт. Шиғырҙарҙы уҡыған һайын, шағирҙың был сәнғәтте нисек тойған, ҡәҙерләгән икәнен аңлайһың. Шиғырҙар уҡыусыны

тойғоландыра, был мәлде күҙ алдына баҫтырыу, йөрәкте елкенләндереү көҙрәтенә эйә.

Бына, мәҫәлән, “Кантүш турғайҙар” шиғырында автор кышкы һыуык көндәрҙә кыҙылтүштәрҙең кайтыуын тасуирлаған. Була бит шундай сак: тәбиғәттең матурлығын күрәһең, ә уны һүрәтләргә һүҙҙәр табылмай. Ә авторҙың һүҙ-буяуҙары сағыу һәм төрлө. Улар ошо мәлде татып кисерге, күрге килеү тойғоларын арттыра.

Коштар образына миҙгелдәр алышыныуын тасуирлаған шиғырҙарында ла тап булабыҙ. Һәр миҙгел дә якын шағирға. “Кантүш турғайҙар”ҙа кыш мәле, “Сыйырсык” шиғырында яҙ килеүе һүрәтләнә. Йәй көндәрендә уның һандуғас һайрауына иҫе китһә, көҙ көнө торналар менән моңһоулана. Каҙ, күгәрсен образдары аша әҙип йәмле бала сак миҙгеленә әйләнеп кайта.

Тәбиғәтте ярatкан кешегә хас күҙәтеүсәнлек, тойғолар сафлығы һәм шағирлык таланты. Бына ошо әйтелгәндәр хас Р. Ғариповтың был шиғырҙарына.

Бер төркөм шиғырҙарынан күреүебеҙсә, коштарҙы күҙәтеү уға тормош, йәшәйеш, кешеләр һәм уларҙың сифаттары хакында ла кыҙыклы дөйөмләштереүҙәр яһарға мөмкинлек биргән.

Кайһы сак был күҙәтеүҙәр якшы һығымталар яһатмай. “Аксарлактар” шиғырында, мәҫәлән, лирик герой аксарлактарҙы һокланып күҙәтә. Тик аксарлактарҙың балык өсөн тарткылашыуын күргәс, уларҙы “меҫкен”, “төштөгөҙ капыл күҙҙән” тигән һүҙҙәр менән әсенеп кылыкһырлай.

Ысынлап та, тәү kарашkа hokланыу уяткан кешеләрҙең юk-бар өсөн "яçkышыуҙары" тормошта була. Әгәр hин ғорур аkсарлаkтар затынан икән, был исемгә лайыk булып kал, тимәксе шағир. "Бөркөт" шиғырында азатлыk, ғорурлыk хаkында hүҙҙе дауам итә. Әçәр рус шағиры А.С. Пушкиндың "Тоtkон" шиғыры менән ауаздаш. Ике шиғырҙа ла шағирҙарҙың да әйтер hүҙе бер: бөркөт ситлек kошо түгел, ул – ирек kошо!

Дуçтары, kәләмдәштәренә кәңәштәрен, теләктәрен kоштарға образына бәйләп еткерә автор. Т. Йосоповkа бағышланған "Торналарға табыныу" шиғырында "Күктәге торнаға ышанып, kулындағы сәпсекте ысkындырма" тигән мәkәл менән килешмәçкә, бейеклектәрҙе үрләргә саkырhа, Б. Бикбайға арналған "Kарлуғас" әçәре аша шағир тотош тарихыбыҙҙы күҙ алдына баçтыра Эйе, ысын шағир әçәрҙәрендә бәләкәй генә kарлуғас та оло hығымталар яhата.

Р.Ғариповтың мөхәббәт хаkындағы шиғырҙары бихисап. Был шиғырҙарында автор күберәк hандуғас, аkkош, kайhы саk kайын ағасында моңланыусы кәкүк образдарына мөрәжәғәт итә. hөйөү хистәре шағир күңелендә берсә ут уйната, берсә иремәçтәй кеүек боҙҙар kалдыра.

"Уның әçәрҙәре йөрәк серҙәрең менән йәшермәйенсә бүлешкән шиғри көндәлекте хәтерләтә",- ти Р.Бикбаев. Ысынлап та, шиғырҙарҙа үҙендең тойғоларынды уkығандай булаhың. Былар шағирҙың мөхәббәт хаkындағы шиғырҙарын оҙон ғүмерле яhайҙар. Сөнки ысын күңелдән hөйә белгән кешеләр генә ошо хистәрҙе кисерә, ә ундайҙар беҙҙең арала күп

Шағир Р.Ғариповтың ҡоштар образы сағылған шиғырҙары ҡыҙыҡлы, идея-йөкмәткеһе яғынан төрлө, тәрән йөкмәткеле, художестволы үҙенсәлектәргә бай. Был әҫәрҙәр әҙип ижадында ғына түгел, ә тотош башҡорт әҙәбиәтендә әһәмиәтле урын тоталар.

Беҙ тикшереү һөҙөмтәләренә нигеҙләнеп, мультимедиялы презентациялар, китапсыҡ әҙерләнек. Был материалдарҙы Туймазы педагогия колледжында уҙғарылған «Йырым йәшәр әле илемдә» аталған кисәлә ҡулландыҡ. Беҙҙеңсә, уларҙы студент һәм уҡытыусылар шағир ижадына бәйле дәрестәр, саралар үткәргәндә ҡуллана алалар.

Тема өҫтөндә эшләгәндә беҙ Р.Ғариповтың үҙен дә бөркөт кеүек ғорур шәхес, һабантурғай кеүек тормошто данлаусы, һандуғас кеүек мөхәббәт йырын йырлаусы нескә күңелле шағир итеп күҙ алдына баҫтырҙыҡ. Иманыбыҙ камил, беҙҙең йәштәштәр ҙә, киләсәк быуындар ҙа был әҫәрҙәрҙе уҡып илһам алыр һәм рухи кинәнес кисерер.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.

Һорауҙарығыҙға яуап бирергә әҙермен.